7 класс
13.10.23

Өйрәтеү изложениеһы

# ПОЛК УЛЫ

Мәктәптә Маратты айырыуса ҙур шатлыҡ көтөп тора ине. Бер нисә көнгә фронттан атаһы ҡайтҡан. Ул өлкән лейтенант, рота командиры булып хеҙмәт итә. Атаһының китер ваҡыты еткәс: «Атай, мин дә һинең менән китәм», – тип башланы Марат. Атаһы алып китергә риза булмағас: «Мин барыбер ҡасып китәм», – тип үҙ һүҙен һөйләне.

Улының шундай ныҡыш икәнен күргәс, атаһы уны алып китергә булды. «Барыбер әсәһе юҡ, часта тағы ла уның кеүек ике малай йәшәй бит! Шулар менән торор, янымда, күҙ алдымда булыр», – тип уйланы ул.

Роталағы һалдаттар Маратты бик йылы ҡаршыланы. Тиҙ арала форма ла рәтләп бирҙеләр. Уға ярарлыҡ итек тә табылды. Ә полк командиры махсус бойороҡ менән Маратты штабҡа йомошсо итеп билдәләне, тик ҡорал ғына бирмәнеләр.

– Бала-сағаға ҡорал бирелмәй, – тип ҡырт киҫте старшина. Ләкин бәләкәй генә буш кобура сығарып, уны кескәй һалдатҡа һондо. – Мә, ошоно тағып йөрөһәң дә яраған.

Шулай итеп, Урал тауҙары араһында Белорет районы Сермән ауылында тыуып үҫкән Марат полк улы булып китә.

1943 йылдың икенсе яртыһында беҙҙең ғәскәрҙәр дөйөм һөжүмгә күсә. Дошман сигенгәндә бик күп урындарға миналар ҡуйып ҡалдыра бара.

Беҙҙең минерҙар ике көн буйына территорияны дошман ҡалдырған «күстәнәстәр»ҙән таҙарта. Өсөнсө көндө элеватор баҫҡыстары буйлап йөрөгәндә, Марат бер баҫҡыс аҫтында сүп-сар араһында ятҡан ҡатырға йәшникте күреп ҡала. Марат Ваняны саҡырып ала ла үҙенең мина табыуы хаҡында әйтә.

Малайҙар тиҙ генә минерҙарға хәбәр итә, һәм «табыш», ысынлап та, ҡурҡыныслы булып сыға.

Бына Днепропетровск ҡалаһы ла азат ителә. Полк штабы шул тирәлә ятҡан ҙур ғына украин ауылында урынлаша.

Киҫкә табан полкка ҡайтып килгәндә, Мараттың күҙе күпер төбөндә торған бер шикле сержантҡа төшә.

Ҡайтҡас та, малайҙар әлеге сержант тураһында Мараттың атаһына һөйләйҙәр. Ул шунда уҡ кемгәлер шылтырата. Тиҙҙән бер нисә һалдат ултырған автомашина килеп тә етә. Күпер янына килгәндә, ҡараңғы төшкәйне инде. Минерҙарҙың береһе кеҫә фонарын тоҡандыра ла күпер аҫтына төшә.

Байтаҡ ваҡыт үткәс, ул күпер аҫтынан, һаҡ ҡына тотоп, мина алып сыға.

Ә иртәгеһен малайҙар мина ҡуйып киткән теге сержанттың ҡулға алыныуын ишетәләр. Ул, ысынлап та, диверсант булып сыға. Был юлы полк командиры үҙе рәхмәт белдерә.

Шул саҡтарҙан бирле күп ваҡыт үтте. Элекке пионер һәм кескәй һалдат Марат Дәүләткирәев хәҙер командир булып бөгөнгө тыныс тормош һағында тора. *(343 һүҙ)*

*З. Ғәниева*тан

45-се бит
изл. йыйынты…